Тема: Һәр кемгә – үҙ һөнәре
Һәләк булмай һөнәрле.

Маҡсат: һөнәр исемдәре менән таныштырыу, төрлө һөнәр кешеләре тураһында һөйләшеү; яңы һүҙҙәр үҙләштере; хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләү.

Йыһазлау: предметлы һүрәттәр, кроссворд, видео таҫма.

Дәрес барышы

1. Ойоштороу моменты.

2.Дәрестең темаһын һәм маҡсатын әйтеү
- Дәрестә беҙ һеҙҙең менән төрлө һөнәр кешеләре тураһында һөйләшәсәкбеҙ.Шуның өсөн дә дәресебеҙҙең темаһы:
«Һәр кемгә – үҙ һөнәре, һәләк булмай һөнәрле» тип атала.

3. Артикуляцион күнегеүҙәр

1) - һуҙынҡылар таҫмаһын уҡыу
- тартынҡыларҙы өҙөп, шартлатып уҡыу
-тартынҡы менән һуҙынҡыны ҡушып уҡыу алда, артта, уртала

2) Маскалар менән эш
Әсәһе күлдәк тегә,
Гәзит уҡый атаһы,
Өләсәһе ойоҡ бәйләй,
Дәрес ҡарай ағаһы.

3) 6 рычаг менән эш(дәрес темаһын уҡыу)

4 Өйгә эште тикшереү, баһалау(32-се бит)
«Икмәк көсө» тексын тасуири уҡырға ине.
-Тексты сылбырлап тасуири уҡыу.
-Тексты нисек аңлауҙарын таблица ярҙамында тикшереү.
-Текста ниндәй һөнәрҙәр осраны? Табып уҡығыҙ.

5. Яңы тема

1) Кроссворд сисеү

- Балалар, иғтибар менән таҡтаға ҡарағыҙ әле. Бында һеҙгә кроссворд бирелгән һәм төрлө һөнәр кешеләре төшөрөлгән.

Әгәр ҙә беҙ һәр һөнәр исемен үҙ урынына ҡуйып, шаҡмаҡтарҙы дөрөҫ тултырһаҡ, бөгөнгө дәресебеҙҙең темаһын уҡыясаҡбыҙ. (Һөнәрҙәрҙе русса әйттереү, тәржемә иттереү, шаҡмаҡтарға яҙҙырыу).

- Повар - ашнаҡсы. Ул нимә эшләй?
- Һауынсы, төҙөүсе, ашнаҡсы, тәрбиәсе, йырсы, яҙыусы, тәржемәсе, ҡурайсы.

2) Таҡтала эленеп торған һүрәттәрҙе ҡарау

- Балалар, был һүрәттәрҙә ниндәй һөнәр кешеләре һүрәтләнгән?
- Улар ниндәй эштәр башҡаралар?

Парикмахер- сәс киҫеү оҫтаһы<br>
Врач- табип<br>
Пожарник- янғын һүндереүсе<br>
Милиционер, һатыусы, шофер.

3) Яуабын тап !

- Хәҙер мин һеҙгә шиғырҙар уҡыйым, ә һеҙ кем тураһында һүҙ барыуын әйтергә әҙерләнегеҙ.

Сирлеләргә дарыу бирә,<br>
Бәйләй ул яраларҙы.<br>
Укол ҡаҙап төҙәтә ул<br>
Илаған балаларҙы. (Табип)

Кем тегә матур күлдәктәр,<br>
Кем яһай аҫыл биҙәктәр?<br>
Ул беҙгә яҡын кеше –<br>
Ул да булыр – тегенсе.

Бүлмә тып – тын.<br>
Дәрес бара.<br>
Яңы тема бик ҡыҙыҡ.<br>
Уҡытыусы һөйләгәнде<br>
Беҙ тыңлайбыҙ йотлоғоп. (Уҡытыусы, уҡыусылар)

Кем тәмле аштар бешерә,<br>
Гел беҙҙе иҫкә төшөрә?<br>
Ул беҙгә яҡын кеше –<br>
Ул бит беҙҙең ашнаҡсы. (Ашнаҡсы)

Беҙҙең Гүзәл – һатыусы
Башҡалары – алыусы.
Ана, асыҡ магазин,
Ашыҡмайса әйҙә ин.(Һатыусы)

Уҡытыусы – ниндәй гүзәл исем .
Кеше итеп һине әҙерләй.
Тормоштоң ул көрәшсеһе итә,
Кескенәнән һөйә, ҡәҙерләй. (Уҡытыусы)

Кем дәрескә әҙерләй
Дәфтәр, ҡәләм, буяуҙар?
Һауа торошон тикшереп,
Билдә ҡуйып буяйҙар? –
(Беҙ – уҡыусылар )

Дәреслектән (30 бит) 40-сы күнегеүҙәге тексты уҡыу.

- Эйе, уҡыусылар, донъяла һөнәрҙәр бик күп. Ә хәҙер уларҙың тағы ла бер нисәһе тураһында текстан уҡып үтәйек.

1. Һүҙлек эше
2. Уҡытыусының уҡыуы
3. Сылбырлап уҡыу, тәржемә итеү
4. Һорауҙарға яуап биреү :

- Машинаны кем йөрөтә? ( Шофер)
- Игенде кем үҫтерә? (Игенсе)
- Кемдәр фабрикала кейем тегә? (Тегенсе)
- Мәктәптә кем эшләй? (Уҡытыусы)
- Табип нимә эшләй? (Кешеләрҙе, ауырыуҙарҙы дауалай)
- Ашнаҡсы ни эшләй? (Тәмле аштар бешерә)

- Ә беҙҙең уҡыусылар үҫкәс кем булырға теләйҙәр икән, әйҙәгеҙ әле видео таҫманан ҡарап үтәйек.

Күнегеүҙәр эшләү.

№ 45 Һүҙҙәрҙе үҙ урындарына ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙ.
- Һүҙҙәрҙе уҡыу, тәржемә итеү; һөйләмдәр төҙөү,тәржемә итеү.

№ 49 Һүҙҙәргә ялғауҙар өҫтәп һөнәр исемдәре яһап яҙыу, тәржемә итеү.

6) Тринажер таблицалары менән эш

Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ.

Е195т 197,213,222 ет190ш 65р56 80,219р 231 аҙ.

Һөнәрле үлмәҫ, һөнәрһеҙ – көн күрмәҫ.

80,219р191 үл217ҫ , 80,219р215ҙ - 62н 143р217ҫ.

Эшләгәнең кешегә булһа, өйрәнгәнең үҙеңә булыр.

Эш218,222,192ң 197,213,222 126л26 , өй221н222,192ң ү204,220 126,164р .

6. Йомғаҡлау, баһалау.

- Бөгөн дәрестә беҙ нимәләр тураһында һөйләштек? Ниндәй һүҙҙәр өйрәндек? Ниндәй яңы һөнәрҙәр белдек?
- Тимәк, балалар, һөнәрҙәр беҙгә ни өсөн кәрәк?
- Дәрестең файҙаһы һеҙгә үҙегеҙҙең киләсәктә һайлаған һөнәрегеҙҙе конкретыраҡ күҙ алдына килтерергә ярҙам иткәндер тип уйлайым.
- Эйе, һәр кешенең яратҡан һөнәре булырға тейеш. Ләкин һөнәрле булыр өсөн беҙгә нимә эшләргә кәрәк? Тырышып уҡырға, ата- әсәне тыңларға, төрлө нимәләр менән ҡыҙыҡһынырға кәрәк.

- Дәресте мин шиғыр юлдары менән тамамларға теләйем

- Нимә ауыр, нимә еңел,
  Үҙең табып, бел, бала.
  Хеҙмәт менән ғүмер итеү –
  Иң ҙур бәхет донъяла.